# Ынйылар

*Пиши о том к чему лежит душа...*
*Акмулла*

Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия – интернаты гәзите № 1 (101), октябрь 2017 йыл

## *Һеҙ, хәрефтәр генә өйрәтмәйһегеҙ, өйрәтәһегеҙ йәшәргә!*




**_Хөрмәтле уҡытыусылар, тәрбиәселәр һәм педагогик хеҙмәт ветерандары!_**

*Уҡытыусы – ниндәй изге кеше! Минең уйлауымса, бөгөнгө көндә заман менән бергә атлау, уҡыусыларҙың белем сифаттарын арттырыу, киләсәктә Республикабыҙҙың ҙур шәхестәрен үҫтереү беҙҙең төп бурыстарыбыҙҙың береһе булып тора.*

*Һеҙҙе ысын күңелдән профессиональ байрам-Уҡытыусылар көнө менән ҡотлайым! Еңел булмаған эшегеҙҙә яңынан – яңы ижади баҫҡыстарға күтәрелергә яҙһын, таҙа, һау - сәләмәт йәшәргә насип булһын! Тылсымлы ҡояш нурҙары, серле наҙлы мөхәббәт менән бергә осрашһындар, ғаиләгеҙгә көҙ менән бергә урғылып шатлыҡ, бәхет инһен. Шулай уҡ рух ныҡлығы, шатлыҡ-ҡыуаныстарға бай яҡты көндәр, тағы күп йылдар тормоштоң йәмен-тәмен татып, имен тормошта йәшәүегеҙҙе теләйем!*

**_Иң изге теләктәр менән, БГИ директоры Д.Ғ. Фәтхетдинова_**




День учителя - это профессиональный праздник всех работников образования. С 1994 года День учителя стал отмечаться 5 октября вместе со Всемирным днём учителей. В День учителя педагоги принимают поздравления от своих учеников, которые дарят им цветы и подарки. Дети организовывают концерты, рисуют стенгазеты и по традиции проводят День самоуправления.

Искренне хотим поздравить
С Днем учителя мы вас!
Благодарны вам сердечн
Что вы учите всех нас.

Вы нам знания даете,
Помогаете всегда.
Мы желаем вам здоровь
Денег, радости, добра.

Пусть печали, грусть, невзгоды
Вас обходят стороной.
Пусть всё лучшее прих
Поскорее к вам домой.

### *Икенсе әсәйебеҙ!*

Уҡытыусым- яҡын булған,
Икенсе әсәйебеҙ.
Беҙҙең өсөн эшләй улар,
Шуга ла рәхмәтлебеҙ.

Бөтә булган матур һүҙҙе,
Беҙ һеҙгә еткерәбеҙ.
Түҙемлелек, бәхет, шатлыҡ
Ҡыуаныс теләйбеҙ беҙ!

***Вәлиәхмәтова Динара,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***



### Уҡытыусым

Белем һуҡмағына тәүләп
Етәкләп алып менгән,
Белем серҙәрен өйрәткән,
Уҡытыусым, бер генәм.
Ауыр саҡта ярҙамсы ла,
Тапҡыр кәңәш биреүсе,
Тоғро дуҫ та серҙәш тә һин,
Тура юл күрһәтеүсе.
Һинең исемеңде, уҡытыусым,
Күңелемдә мәңге һаҡлармын.
Киләсәктә ышанысығыҙҙы,
Өмөтөгөҙҙө аҡлармын.
Уҡытыусым, беҙгә һаман
Терәкһең һәм кәрәкһең.
Рәхмәттәрҙең иң олоһон
Әйтәм ысын йөрәктән.

***Ҡасымова Зилиә,***
***11-се а класы уҡыусыһы.***



### *Хөрмәтле уҡытыусылар!*

Ҡотлайбыҙ һеҙҙе Уҡытыусылар көнө менән! Барығыҙға ла ныҡлы сәләмәтлек, аҡ бәхеттәр, бай, яҡты көндәр теләйбеҙ. Йөҙөгөҙҙө һәр саҡ шат йылмайыу биҙәһен, күңелегеҙҙе балаларығыҙҙың һәм яҡындарығыҙҙың ихлас һөйөүе, ихтирамы яҡтыртһын. Гел уңыштар именлек һәм изгелектәр генә юлдаш булһындар.

***Гимназия-интернат уҡыусылары .***

# Киләсәк беҙҙән башлана

Бәләбәйем күкрәгендә
Ырыуымдың ете тажы
Бында минең тамырҙарым,
Башҡорт йыры, башҡорт наҙы.
Уңыш өсөн белем йыям
Һынатмабыҙ гимназиям.

Ысынлап та, был Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия - интернаты гимнының һүҙҙәрендә тәрән мәғәнә ята.

Бөгөнгө көндә Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия-интернатында бөтәһе 573 уҡыусы белем ала. II корпуста ҡыҙҙар, ә инде III корпуста малайҙар ғына тора. Яҡшы уҡыу өсөн бөтә мөмкинселектәр ҙә бар, һәм беҙҙең бурысыбыҙ – тик яҡшы билдәләргә генә уҡыу. Интернатта беҙ бер татыу ғаилә булып йәшәйбеҙ. Бүлмәләр яҡты, иркен, йылы, үҙебеҙҙе үҙ йортобоҙҙағы һымаҡ хис итәбеҙ. Атай -әсәйҙәр беҙҙе ышаныслы ҡулдарға – тәрбиәселәргә тапшырҙылар. Ашханала көнөнә 5 тапҡыр тәмле аштар бешерәләр.

Беренсе көндән башлап миңә гимназияла уҡыуы бик оҡшаны. Гимназиябыҙ заманса йыһазландырылған: кабинеттарҙа компьютерҙар, телевизор, магнитофон, яңы уҡыу әсбаптары булдырылған.

Төрлө түңәрәктәр, махсус курстар уҙғарыла. Был дәрестәрҙе уҙғарыусы, беҙҙе етәкләп белем иленә алып барыусы, ҡәҙерле уҡытыусыларыбыҙ ҙа миңә бик оҡшай.

Киләсәктә беҙҙең гимназияға республикабыҙҙың төрлө төбәктәренән минең һымаҡ уҡыусылар белем алырға килерҙәр тип уйлайым.

**Бөтә уҡытыусыларҙы һөнәри байрамдары менән ысын күңелдән ҡотлайым! Һеҙгә таҙалыҡ, яҡшы, тырыш уҡыусылар теләйем! Уңыштар һеҙгә!**

***Мигранова Юлиә, 5-се б класы уҡыусыһы.***





## Көләмәстәр

Мәктәп - интернатта әҙәбиәт дәресе бара.
-Бына, балалар, беҙ Чеховтың “Ванька” хикәйәһен үттек. Хәҙерге заманда, әлбиттә, балалар бындай хаттар яҙмайҙар...
-Нисек инде?-ти Рәмил.- Яңыраҡ ҡына Әкрәмдең өйөнә: -Олатай, алып ҡайтығыҙ мине бынан!- тип яҙғанын үҙем күрҙем.

* * *

Имтихан бара.Уҡыусы бер ни белмәй.
-Йөрәктән өҙөп булһа ла “өслө” ҡуйыр инем, әгәр уҡыусыларҙың иң йыш биргән яуабын әйтә алһағыҙ,- тигән тәкдим индерә уҡытыусы.
-Белмәйем,-ти уҡыусы.
-Аф - фарин! Дөрөҫ.

* * *

Малай уҡытыусы янына килә:
-Бына дүрт алма,- ти ул,- һеҙгә бүләк итәм. Миңә шуның өсөн дүртле ҡуйығыҙ.
-Ғәфү ит, мин икәүһен генә алам,-ти уҡытыусы.

* * *

Уҡытыусы:
-Кем аҡыллыраҡ: кешеләрме, әллә хайуандармы?
-Әлбиттә, хайуандар! – ти Вәли.
-Аңламайым?!
-Мин этем менән һөйләшкәндә, ул мине аңлап тыңлай, ә ул өрә башлаһа, мин бер нәмә лә аңламайым.

* * *

Физика уҡытыусыһы:
-Илдар, әйт әле, яҡтылыҡ нуры һыу эсенә барып ингәс ни эшләй?
-Нимә эшләһен инде, еүешләнеп сыға.

* * *

Уҡытыусы:
-Ильясов, алты алтың нисә?
-Алтмыш алты!
-Дөрөҫ түгел! Әхмәҙуллин, беләһеңме яуапты?
-Эйе, шаршамбы була.
-Дөрөҫ түгел! Кәримов, һин ни әйтерһең?
-Яуап-36!
-Дөрөҫ! Нисек һанап сығарҙың?
-Еп-еңел, алтмыш алтынан шаршамбыны алдым.

***Изиәтуллина Чулпан, 5-се б класы уҡыусыһы.***

# Көҙһылыуҙа ҡунаҡта

## Алтын көҙҙөң матурлығы

Бына йәмле алтын көҙ етте. Бөтә тәбиғәт кейемен алыштыра. Ағастар һары, ҡыҙыл, көрән төҫкә инде. Ҡояш әле йылытһа ла оҙаҡламай һыуыҡ көндәр башланасаҡ.

Ҡайындар һары тәңкәләрен ҡоялар, ә ел уларҙы уйнатып бөтә ергә тарата. Тик шыршылар ғына йәм-йәшел булып ултыра. Күп ҡоштар йылы яҡҡа ашығалар. Торналар тыуған ере менән хушлашып, бер ерҙе урап, ҡыйҡылдаша-ҡыйҡылдаша осоп китәләр. Башҡа ҡоштар ҙа осоп китергә йыйыналар.

Көҙҙөң матурлығы күңелгә яҡтылыҡ кереткән һымаҡ. Ул килгәнгә күңелдә шатлыҡ та, моңһоулыҡ та бар. Урмандың төрлө төҫтәге булыуы күҙҙең яуын алып тора. Тик был матурлыҡ оҙаҡҡа түгел. Һыуыҡ елдәр иҫә башлағас, урман яланғас ҡаласаҡ. Шуның өсөн был матурлыҡты тоя һәм яратып ҡалырға кәрәк.

Ағастарҙың ҡоро япраҡтары
Унда-бында ғына ҡалдылар.
Ҡоштар осоп китҡәс яландары,
Йоҡлағандай тынып ҡалдылар.

***Хәлиуллина Линә. 6-сы а класы уҡыусыһы.***



## Яратҡан йыл миҙгелем

Көҙ-донъяла иң матур миҙгел. Көҙ етеү менән ағастарҙың япраҡтары алтын төҫкә керә,үләндәр һарғая. Ҡоштар йылы яҡҡа осоп киттеләр, уларһыҙ ағастар буш, күңелһеҙ булып ҡалды.

Һыуыҡ ел иҫә. Елдең иҫеүе ерҙә ятҡан алтын япраҡтарҙы һелкетә. Шул ваҡытта япраҡтарға йән кергән һымаҡ. Тиҙҙән һыуыҡ етә тип, йәнлектәр ҡышҡа әҙерләнәләр. Тейендәр бәшмәктәр йыйып, ағасҡа киптерергә ҡуя. Терпеләр алтын япраҡтарҙы йыялар.
Бына нindәй матур була көҙ!

Алтын көҙ килеп етте,
Ағастарҙы биҙәне,
Ямғырҙарҙы саҡырҙы,
Урмандарҙы көйҙөрҙө.

***Миһранова Юлиә, 5-се б класы уҡыусыһы.***

## Алтын көҙ

Көҙ! Ниндәй матур миҙгел! Кем генә яратмай икән көҙҙө. Йәмле йәйҙән һуң көндәр һыуына, тәүге ҡырау төшә. Йәй айҙарында уҡ баҫыуҙарҙан уңыш йыйып алынды. Ағастарҙа тәүге һары, ҡыҙыл япраҡтар күренде.Ҡоштар йылы яҡҡа осорға әҙерләнәләр.

Ауылдарҙа уңыш тулыһынса йыйылып алынды. Күк йөҙө ҡап-ҡара болоттар менән ҡапланды, ямғыр шыбыр-шыбыр яуа башланы. Яҙғы Ләйсән ямғырын көҙгө һыуыҡ, ҡар ҡатыш ямғырҙар алыштырҙы. Ә инде ноябрь аҙағында тәүге ап-аҡ ҡар ер йөҙөн ҡаплаясаҡ. Халыҡ һынамышы әйтеүенсә: “Беренсе ҡар төшкәндән һуң, тағы ла ҡырҡ көн үткәс, ҡар ята”.

Шулай уҡ көҙ ҙә бик күптәрҙең яратҡан миҙгелелер. Һеҙҙең күргәнегеҙ бармы һап-һары саған ағасын? Ә минең бар. Иҫ-киткес матур ул! Ямғыр һәм һыуыҡ елдәргә ҡарамаҫтан, көҙ, үҙенсә, бик матур миҙгел!

***Насырова Нүзилә, 6-сы б класы уҡыусыһы.***

### Балалар бик шатлана

*Уҡыу йылы башла,*
*Балалар бик шатлана.*
*Мәктәптә уҡытыусылар*
*Уларҙы ҡаршы ала.*

*Тотоп улар ҡулдарына*
*Матур-матур сәскәләр,*
*Шатландырып бер-береһен,*
*Бәхет нуры сәсәләр.*

***Аҙнағолова Аделина,***
***6-сы а класы уҡыусыһы.***



### Дуҫтарым

Көләс йөҙлө, наҙлы күҙле
Һеҙ бит дуҫтар бер генә.
Ярҙам ҡулын һуҙырға һеҙ
Һәр ваҡыт әҙер генә.

Минең дуҫ ҡыҙҙарым:
Яҙгөл, Наҙгөл, Зилиә.
Барығыҙ ҙа шәп кенә,
Шәп кенә, терәк кенә.

***Вәлиәхмәтова Динара,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***

# Гимназиям тормошонан

## Осенняя ярмака

Осень - прекрасная пора. Но многие не очень любят это время года, так как люди выходят из отпуска и совсем не замечают, что пропускают этот яркий и волшебный период.



Чтобы осень осталась в нашей памяти ярким впечатлением, в Башкирской гимназии-интернате 25 сентября состоялась ярмарка. В ней принимала участие вся школа: от начальных классов до выпускников, учителя, воспитатели, все сотрудники. Все активно занимались продажей товаров. Разнообразие ассортимента привлекло покупателей - учащихся, гостей, а также работников гимназии. Было всё: всевозможная выпечка - от хот- догов и печенья до пирогов, от соления до варенья.



Конечно же, она не состоялась бы без наших дорогих мам и бабушек, без их золотых рук. Огромная доля успеха была заключена в их мастерстве и выдумке, разумеется, в предпринимательстве наших учеников. Такая ярмарка в нашей гимназии стала уже традицией.



Вырученные деньги идут в фонд класса, то есть на проведение мероприятий, призы, подарки.



Всем нравится такие мероприятия. Мы учимся азам предпринимательства и экономики, культуре поведения, общению друг с другом. Они сближают ребят, при этом мы получаем заряд хорошего настроения.

Хотелось бы, чтобы эта традиция продолжалась...

***Ефремова Алиса,***
***ученица 9 в класса.***

## Алтын көҙ

Бына көҙ килде урманға,
Уны төҫтәргә буярға.
Алып килгән үҙе менән
Һары,ҡыҙыл буяуҙар.

Үҙгәрҙе бөтә донъя:
Ҡоштар йылы яҡҡа китте,
Көҙһылыу ямғыр сәсте,
Ҡояш нурҙарын һипте.

***Йосопова Радмила,***
***5-се б класы уҡыусыһы.***



## Тыуған тел

*Күп телдәр бар донъяла:*
*Башҡорт, урыҫ,башҡалар.*
*Тыуған телдә яҙыла,*
*Беҙ яһаған хаталар.*

*Иң матур тел-тыуған тел!*
*Иң яҡын тел- тыуған тел!*
*Яратҡан тел донъяла,*
*Һәр бала ғорурлана!*

***Вәлиәхмәтова Динара,***
***7-се б класы уҡыусыһы.***



«Ыңйылар»

Учредитель-Администрация МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Выходит с 1 сентября 2005 года.

Главный редактор З.Х.Исламова
Ответственная за выпуск З.Х. Исламова .
Верстка З.Х. Исламова
Редакция может не разделять мнение авторов статей.

Адрес редакции: 452000, РФ РБ, г. Белебей,
ул. Морозова, 2, каб. №36
Телефон: 4-41-70, 3-21-12,
Email: Bel_bg@mail.ru
www.Bel-bgi.ucoz.ru

Газета выходит один раз в месяц в редакции МАОУ Башкирская гимназия-интернат г. Белебея РБ
Распространяется бесплатно.
Тираж 70 экз. 5. 10. 2017г. 9. 00 ч.